**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ**
**ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ**
**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕЛГӘН КИТАПХАНАЛАР СИСТЕМАҺЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**ҮҘӘК РАЙОН КИТАПХАНАҺЫ**
**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ БҮЛЕГЕ**

# Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 115 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә «Илһамлы ижад емештәре»

**Сценарий авторҙары:**
*Рәмилә Файзуллина,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире,*
*Лира Такалова,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге китапханасыһы*

**Аҡъяр-2023 й.**

**Маҡсат:** Зәйнәб Биишеваның тормош юлы һәм ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, яҙыусының әҫәрҙәре аша илһөйәрлек, ғәҙеллек, милли рух сифаттарын үҫтереү, әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** «Яҡты хистәр донъяһы» исемле китап күргәҙмәһе, компьютер, телевизор, слай-презентация, видеоматериалдар.

**1-се алып барыусы:**

Теләр инем, гранит ҡая булып,
Ер өҫтөнә ҡабат тыуырға.
Теләр инем йәшәү ҡаршыһында
Сал башымды эйеп торорға.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар, саҡырылған ҡунаҡтар! Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия лауреаты, прозаик, шағирә, тәржемәсе Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 115 йыл тулыуға арналған «Илһамлы ижад емештәре» исемле әҙәби-музыкаль кисәлә һеҙҙе күреүебеҙгә бик шатбыҙ.

**2-се алып барыусы:**

Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар, ағинәйҙәр!

Зәйнәб Биишева – башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренселәрҙән булып шиғыр китаптарын донъяға сығарған, драма әҫәрҙәре яҙған, киң ҡоласлы, тәрән йөкмәткеле романдарҙан торған беренсе башҡорт трилогияһын ижад иткән ҙур һүҙ оҫтаһы. Йәш ярымлыҡ сағынан әсәйҙән ҡалып, тормоштоң бар ауырлығын үҙ иңендә татыған Зәйнәб Биишева әҙәбиәтебеҙҙең сағыу йондоҙо ул.

Бөйөк яҙыусы барлыҡ һәләтен һәм ғүмерен халҡына, ятраҡан теленә, арнай. Яҙыусының һүҙ ынйылары уның ижадында асыҡ сағыла, халҡыбыҙға, телебеҙгә ихтирам тойғоһо ярылып ята. Зәйнәб Биишеваның һәр әҫәре юғары рухта, күңел күтәренкелеге менән яҙылған.

Йәшәү бәхете - күңел сафлыҡта.

Йәшәү бәхете - дуҫлыҡ, сафлыҡта.

Йәшәү бәхете - илең, халҡың өсөн

Хеҙмәт аша тыуған хаҡлыҡта.

**1-се алып барыусы:** Зәйнәб Биишева Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында 1908 йылдың 2 ғинуарында, крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ата-әсәһенән бик иртә етем ҡала. Зирәк ҡыҙ бәләкәй саҡтан белемгә ынтылып үҫә. Әммә тормош ауырлығы арҡаһында 4-се класты фәҡәт 1924 йылда тик 16 йәшендә генә тамамлай. Мәктәп йылдарында уҡ шиғырҙар яҙа башлай, ҡулына килеп эләккән һәр китапты рәхәтләнеп уҡый.

Зәйнәб Биишева үҙенең «Үткән юлдар, уҙған йылдар» исемле китап хәтирәләрендә былай тип яҙа: «Өйҙә үгәй әсәйҙең ҡатылығы, урамға сыҡһаң «килмешәк», «ерһеҙ» тип ситләтеүҙәр арҡаһындалыр инде, мин бик моңһоу һәм ҡырыҫ булып үҫтем... Беҙҙең өйҙә бер нәмәлә булмаһа ла, китап тулып ята торғайны. Ул ваҡытта ҡырҡтартмасы китап һатыусылар тулып йөрөй. Атайым һатып ала торғайны... Атайым Ғабдулла Туҡайҙы ярата торғайны, уның бар китаптары, Ғәлимйән Ибраһимовтың әҫәрҙәре лә өйҙә булды. Атайым һатып ала мин йәшенеп кенә уҡыйым. Атайым минең уҡый белгәнемде белмәне. Бер ваҡыт ут яҡтыһында ғына «Таһир менән Зөһрә»неме, әллә «Йософ менән Зөләйха»нымы уҡып ултырһам, күрҙе лә: «Ҡараңғыла шуны уҡып ултыраһыңмы? һиңә иртә әле!», — тине лә китапты утҡа ырғытты.

***Башҡортостан ижад телевидениеһының «ХАЗИНА» ижад берекмәһе төшөргән видеояҙманы күрһәтергә***

***(З. Биишева бала сағы тураһында үҙе һөйләй).***

**2-се алып барыусы:** 1924 йылдың йәйендә Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Ырымбур өлкәһенең Ташлы ауылына әҙерлек курсында, аҙаҡтан Ырымбурҙа башҡорт педагогия техникумында уҡый. Уҡыу йылдарында ул әҙәбиәт менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башлай, техникумда сығарылған «Йәш быуын» журналына материалдар йыя, мәҡәләләр яҙа, онотолоп китеп китаптар уҡый.

Зәйнәб Биишеваның тәүге «Гөрләүектәр араһында» исемле хикәйәһе 1930 йылда «Пионер» журналында баҫыла. Ә тәүге «Партизан малай» тигән китабы 1942 йылда сыға. Унда үҫмерҙәрҙең һуғыш яландарында күрһәткән батырлыҡтары һүрәтләнә.

Ырымбур педагогия техникумын тамамлағас, Зәйнәб Биишева Баймаҡ районының Билал мәктәбенә уҡытыусы булып эшкә килә. «Бәләкәс кенә булһа ла, ут бөрсәһе һымаҡ булды. Бөтә кешене ауыҙына ҡаратып һөйләр ҙә, арымай-талмай эшләр ине. Йәш кенә булһа ла, ныҡ белемле, һәләтле ҡыҙ булды. Сәсе лә ҡыҫҡа итеп ҡырҡтырылған ине», - тип иҫкә ала Зәйнәб Биишеваны ауыл кешеләре.

**1-се алып барыусы:** Йәш, бәләкәс кенә булһа ла бик актив була: ауылда ул бер төркөм ҡатындарҙы йыйып киске уҡыуҙар ойоштора. Ҡатындарҙың уҡырға йөрөгөләре килмәй, әммә кем уҡырға йөрөмәй һалым-налог һалабыҙ, тип ҡурҡыталар. Барлы-юҡлы аҡсаларын һалымға түләгәнсе тип ҡатындар һөйләнә-һөйләнә уҡырға йөрөйҙәр, нисә ай уҡығандарҙыр, ҡатындар бөтәһе лә үҙ фамилияларын яҙырлыҡ яҙыу–һыҙыуға өйрәнә. Зәйнәб Биишеваны ярты йылдан Темәс ауылына эшкә күсергәстәр, ҡатын-ҡыҙҙар, бер михнәттән ҡотолдоҡ, тип башҡа уҡырға йөрөмәйҙәр.

«Мин яҙыусы булам, мин кейәүгә сыҡмайым, балаға батып ултырмайым» тип Зәйнәб Биишеваның әйткән һүҙе була, әммә теремек, алсаҡ ҡыҙыҡайға Ғәзиз Әминев исемле егет бер күреүҙән ғашиҡ була. Егет тә төшөп ҡалғандарҙан түгел матур бейей, ҡурайҙа уйнай, йырлай, шулай ике йөрәк ҡауышып 1931 йылда Өфөгә күсеп китә. Уларҙың Ильдар, Тельман, Юлай, Дарвин исемле улдары тыуа.

*Слайдтан ғаиләһенең фотоларын күрһәтеү*

**2-се алып барыусы:** Зәйнәб Биишеваның улы Тельман Әминев хәтерләүе буйынса: «Өҫтәлдән ҡағыҙҙары осоп ҡына китеп тора. Яҙа ла яҙа, икенсеһен башлай, ә беренсеһе иҙәнгә оса. Иҙән тула шулай ҡағыҙҙар менән, һуңынан әсәй уларҙы йыя. Ул шул хәтлем тырыш, эшсән булды, әҫәрҙәрен беҙгә лә уҡып ишеттерә ине».

Зәйнәб Биишеваның иң күләмле, иң уҡымлы әҫәрҙәренең береһе «Яҡтыға» трилогияһы: ул 1929 йылда яҙыла башлай, 1970-се йылдарға тиклем 40 йылдан ашыу яҙыла.

Трилогия ҙур талант эйәһе Зәйнәб Биишеваның башҡорт милли прозаһын үҫтереүгә индергән иң ҡиммәтле ижад емеше, ҡаҙанышы ул. Трилогия өс китап-романдан тора: «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш». Киң ҡоласлы трилогияны кемдәр генә белмәй ҙә, кемдәр генә яратып уҡымай! «Трилогия»ны – тарихи-революцион, шул уҡ ваҡытта автобиографик әҫәр тип тә атайҙар. Сөнки Емештең яҙмышында беҙ яҙыусы Зәйнәб Биишеваның үҙен дә күрәбеҙ.

**1-се алып барыусы:** Оло Эйек буйында ултырған башҡорт ауылы, бәләкәс кенә, ләкин зирәк аҡыллы, яҡты күңелле Емеш һәм уның ата-әсәһе, туғандары менән танышып, беҙ инде артабан ҙур тарихи ваҡиғалар эсенә, революция һәм граждандар һуғышы дәүерендә халҡыбыҙҙың яҙмышын һәм көрәшен, ҙур уй-хыялдарын һәм ынтылыштарын һүрәтләгән образдар донъяһына инеп китәбеҙ.

Ваҡиғалар төп героиня Гөлйемеш-Емеш исемле ҡыҙ тарафынан һөйләнелә. Емештең әсәһе Сәғүрә үлеп ҡалғас, ҡыҙҙың ике апаһы — Бибеш, Йәнеш һәм ағаһы Иштуған өсөн яңы тормош, бер үк ваҡытта ауырлыҡтар башлана. Атаһы Байгилде күрше ауылдан Сәрбиямал исемле, үҙенең балалары булмаған уҫал, үҙ һүҙле ҡатынды балаларына үгәй әсәй итеп алып ҡайта. Сәрбиямал үҙе әсә булып ҡарамаған, был тойғоно татымаған кеше — балаларға артыҡ уҫал, талапсан була.

Үгәс әсәй тарафынан туҡмалып, кәмһетелеп үҫкәнгә беренсе китап «Кәмһетелгәндәр» тип атала.

Икенсе китап «Оло Эйек буйында» — әҫәрендә Граждандар һуғышы һәм шул осорҙа ауылдарҙағы синфи көрәш һүрәтләнә. Емештең Иштуған ағаһы менән Айһылыу еңгәһе Ҡыҙыл армияһы сафында ҡайтып төшәләр һәм Емеш Бибештәрҙә ваҡытлыса йәшәй башлай.

Өсөнсө китап — «Емеш» — төп героиняның балалыҡ осоронан сығып, тормошҡа яңыса бағыуы, ауылда ағаһы Иштуғандар тарафынан асылған мәктәптә уҡыуы, һуңынан Ырымбурға китеп педучилищела уҡыуы, унда яңы дуҫтар табыуы, Байрас менән беренсе мөхәббәт тарихы ла яҙыла.

***Башҡортостан ижад телевидениеһының «ХАЗИНА» ижад берекмәһе төшөргән видеояҙманы күрһәтергә***

***«Кәмһетелгәндәр» романынан өҙөк сәхнәләштереү***

***Һүҙ мәғариф хеҙмәте ветераны***
***Гөлбәҙән Фазылйән ҡыҙы Моталоваға бирелә,***
***«Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтен ҡыҫҡаса һөйләү.***

**2-се алып барыусы:** Зәйнәб Биишеваның ижады башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән. Уның әҙәрҙәре - тауҙай хеҙмәт һәм оло хөрмәткә лайыҡлы батырлыҡ. Шағирәнең үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә: «Изге әсә лә ул, гүзәл эшсе лә ул...». «Сәйер кеше», « Уйҙар, уйҙар…», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?», «Мөхәббәт һәм нәфрәт», бигерәк тә үҫмерҙәр өсөн яҙылған «Дуҫ булайыҡ» повестары, «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» исемле фәһемле хикәйәттәре ялғанды дөрөҫлөктән, яҡшыны ямандан, изгелекте яуызлыҡтан айырырға өйрәтә.
Бөйөк яҙыусы Зәйнәб Биишева – әҙәбиәттең бөтә жанрҙарында ла бына тигән әҙәрҙәр яҙған күренекле прозаик. Һәр береһендә рәхәтләнеп яҙа, әкиәт, хикәйә, хикәйәт, повесть, драма, роман, шиғырҙар, барыһы ла уҡымлы, фәһемле.

Башҡорт телен данлап яҙған шиғыры, телебеҙгә яратырға, һаҡларға, яҡларға өндәй.

***Үҙәк район китапханаһының китапханасыһы Лира Такалова «Башҡорт теле» шиғырын һөйләй***

***Аҡъяр урта мәктәбенең 5а класс уҡыусылары «Яҡшы һәм яман» шиғырын һөйләйҙәр***

***Һүҙ Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, мәғариф хеҙмәте ветераны Мөнәүәрә Исхаҡ ҡыҙы Бохарбаеваға бирелә (З. Биишеваның ижадына байҡау)***

**1-се алып барыусы:**

Йыр яратам, ярһып бер йырлаһам,
Ҡанатланам, күккә ашам мин.
Тыуған ергә ырыҫ, бәхет яулап,
Ал таң булып һыҙылып атам мин.
Йыр яратам, дәрһеп бер йырлаһам,
Мин ҡеүәтле, гүйә бәһлеүән.
Йән сәмләнә ашҡыныулы, наҙлы
Илаһи бер сихри моң менән.
Күкрәк киреп һуҙып йыр йырлаһам,
Өр-яңынан ергә тыуам мин.
Күңелемдә серле шиғри ялҡын
Һүнмәҫ, һүрелмәҫтәй тоям мин.

тип яҙа «Йәшәһен йыр!» тигән шығырында. Мәшһүр яҙыусы Зәйнәб Биишеваның йырлап торған шиғырҙарына көйҙәр һалып, йырҙар ҙа яҙылған.

***Йырсы, ҡубыҙсы, гармунсы, республика кимәлендә үткәрелгән конкурстар лауреаты Гөлфиә Хәләфетдинова башҡарыуында йыр.***

**2-се алып барыусы:** Зәйнәб Биишева башҡорт телен нисек һыу кеүек эсһә, рус телен дә юғары кимәлдә белде, рус яҙыусыларының повесть һәм хикәйәләрен башҡортсаға тәржемә итте. Яҙыусының да әҫәрҙәре күп телдәргә тәржемә ителгән һәм уларҙы төрлө милләт кешеләре яратып уҡый.

Зәйнәб Биишева - оло әҙибә, фекер эйәһе, үҙ халҡын яҡтыға әйҙәүсе. Мәңге һүнмәҫ рухлы, алтынға тиң намыҫлы ижады менән башҡорт халҡының арҙаҡлы яҙыусыһы булып халҡыбыҙ күңелендә юғары урын алды.

***«Яҡты хистәр донъяһы» исемле китап күргәҙмәһенә байҡау яһау, «Дуҫ булайыҡ» повесына төплө туҡталыу.***

**1-се алып барыусы:** Бәләкәйҙән үк хеҙмәт һөйөп үҫкән, тынғыһыҙ йәнле, тура һүҙле, ҡурҡыу белмәҫ батыр йөрәкле, ҙур ихтыяр көсөнә эйә булған талантлы яҙыусы Зәйнәб Биишева тик тырыш хеҙмәт, туған халҡына тоғро хеҙмәт итеүҙе бөтәһенән дә өҫтөн күрҙе. Халҡы уны ярата, хөрмәт итә. Талантлы оло әҙибә халҡыбыҙҙың мәҙәниәт, әҙәбиәт тормошонда ижады, йәшәү рәүеше менән үлемһеҙ ҡаһарманлыҡ символона әйләнде.

Ошоноң менән халҡыбыҙҙың арҙаҡлы ҡыҙы Зәйнәб Биишеваға арналған әҙәби кисәбеҙ тамам, һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, уҡыусыларға тырышып уҡыуҙарын, эшләгәндәргә хеҙмәтенең уңын теләп хушлашабыҙ, һаубулығыҙ!